Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мөхөтдинова  Әлфиә Нәҙерғәле ҡыҙы

# Ҡурай әкиәте

*Маҡсат*: 1. Ауыҙ-тел ижады, әҙәбиәт аша балаларҙа башҡорт халыҡ музыкаһына һөйөү тәрбиәләү.

2. Милли музыка ҡоралы – ҡурай, яҡташ ҡурайсылар менән таныштырыуҙы дауам итеү.

3. Ҡурайҙың башҡорт халҡында ниндәй урын биләүен, һаулыҡ өсөн әһәмиәтен төшөндөрөү.

Йыһазландырыу: Урмандағы ҡош-ҡорт тауыштары яҙылған магнитофон яҙмаһы. Ҡыу ҡурайҙар. Башҡортостан Республикаһы гербы һәм флагы. Милли кейем- һалым. Милли аш-һыу.

*Әкиәт барышы:*

Тирмә. Уның эсе боронғоса биҙәлгән. Һандыҡ өҫтөндә урын йыйылған. (кейеҙҙәр, сергетыш, балаç, мендәр, түшәмес)

Ҡурай. Балалар, мин һеҙгә йылдар төпкөлөнән килгән ҡурай тарихын һөйләйем. Борон-борон заманда, урман аръяғында аҡ өҫтөнә төшкән ҡара тап һымаҡ, йәшәгән ти, бер яуыз хан. Яуыз батша сәсен ҡырҙырыу өсөн Урал буйҙарынан аҙна һайын бер егетте саҡыртып, береһен дә кире ҡайтармайынса, харап итеп торған.Шул ерҙәрҙең урман төпкөлөндә бабай менән әбей йәшәгән, ти.

Атаһы. (сабата үреп) Ҡояш ҡалҡыр ваҡыт етә. Ике улыбыҙҙың береһе кире әйләнеп ҡайтманы. Исмаһам, кинйә улыбыҙ әйләнеп ҡайтһын ине, әсәһе.

Әсәһе.(ҡамыр баçа, күҙ йәштәрен һөртә) Балаҡайыма юлға һалырға бер ниндәй ҙә ризыҡ юҡ. Күкрәк һөтөнә генә ҡабартма бешереп ебәрәйем әле.

(Егет йоҡонон тора)

Егет. Аһ, оҙаҡ йоҡлағанмын. (ҡояшҡа ҡарай) Юлға сығырға ла ваҡыт еткән. Ниңә уятманың, әсәй?

Әсәһе. (ҡосаҡлап) Юлыңа, күкрәк һөтөмә генә баҫып, ҡабартма бешерҙем. Әсә һөтө һине ҡайтыу юлына тартмай ҡалмаҫ! Иҫән-һау әйләнеп ҡайт, балам. Хуш.

Атаһы. Иҫән-һау әйләнеп ҡайт, улым. Хуш. Хәйерле юл һиңә!

Егет. Ҡайғырмағыҙ, атай, әсәй! Мин әйләнеп ҡайтырмын.

Ҡурай. Егет тау-урмандар, йылға-һыуҙар аша хан һарайына барып етә. (Хандың һаҡсылары егеткә юл ҡаплай)

- Эй, ҡайҙа бараһың? Хан ял итә. Ул бер кемде лә ҡабул итмәй.

Егет. Мин хан саҡырыуы буйынса килдем.

- Улай булһа ин.

Сәхнәлә хан тирмәһе. Хан сәй эсеп ултыра. Хан кәләше бейей.

Егет. Һаумыһығыҙ. Мин һеҙҙең саҡырыуығыҙ буйынса килдем.

Хан. Мин хәҙер, сәй эсеп кенә бөтәйем дә. Һин әҙерәк көтөп тор. Ярай, туйҙым. Хәҙер бөтәгеҙ ҙә күҙемдән юғалығыҙ. (битен таҫтамал менән һөртә) Егет хандың мөгөҙөн күреп аптырап китә, шулай ҙа сәсен матур итеп ҡыра.

Егет. Булды, алып бөттөм.

Хан. Һин әҙерәк ял итеп тор, мин хәҙер инәм.

Егет, төйөнсөгөн сисеп, икмәген ала һәм тәмләп ашай башлай.

Хан. (инә) Шул тиклем тәмләп, нимә ашайһың ул? Ҡана, миңә лә ауыҙ иттер. (Егет икмәк һындырып бирә, хан ашай) Бындай тәмле нәмәне ғүмерҙә лә ашағаным юҡ ине. Кем бешерҙе?

Егет. Күкрәк һөтөнә әсәйем бешерҙе.

Хан. (башын тотоп) Ах, ни ҡылырға?! Һине үлтерер инем, имсәктәш туған булдыҡ. Үлтермәһәм, мөгөҙлө булыуымды бөтәһенә лә һөйләрһең. Эй, һаҡсылар! (һаҡсылар йүгереп инә) Был егетте күҙ

күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән, кеше аяғы баҫмаған ергә олаҡтырығыҙ. Шунда үҙ үлеме менән дөмөкһөн! (егетте алып сығып китәләр)

Ҡурай. Егетте, ҡул-аяҡтарын бәйләп, күҙҙәрен ҡаплап, атҡа артмаҡлаған килеш урман шырлығына алып барып ташлағандар. Ул шунда күпмелер ваҡыт eләк-емеш ашап йән аҫыраған. Ә бер көндө шулай ағас күләгәһендә хәл йыйып ятҡанда ниндәйҙер моңло тауыш ишеткән.(Егет инә. Тирә- яғын ҡарап йөрөй ҙә ял итергә ултыра. Ҡурай тауышы ишетелә.)

Ҡурай. Егет ҡурай тауышы ишетелгән яҡҡа китә. Бара торғас, тау түбәһендәге таҡыя башлы ҡыу ҡурайҙы күрә. Ҡурайҙы өҙөп, өрһә, моңло тауыш тағы ла көслөрәк ишетелә. (Егет, ҡурайҙы өҙөп алып, ҡурай эшләп уйнап ебәрә) Егет күңелендәге барлыҡ көйҙәрҙе ҡурайҙа уйнап, тыуған еренә ҡайтып етә. Ата-әсәһе ҡыуанышып йүгереп сыға.

Ҡурай. (ҡурай орлоғон күрһәтеп, залға һибә) Балалар, ошо орлоҡтар һеҙҙең йөрәгегеҙҙә ҡурайға һөйөү булып үҫһен!

Ә хәҙер, балалар, уйнап алайыҡ. Һеҙ – ҡурай балалары, ә мин – Ер-әсә.

- Ҡурай!

- Әү!

- Ҡайҙа үҫтең?

- Уралда!

- Кем ҡырҡты?

- Ҡурайсы.

- Нимәгә?

- Уйнарға.